# Аннотация

төп дөйөм белем биреү буйынса
башҡорт әҙәбиәтенән эш программаһына

Төҙөнө: Ҡаҙаҡколова Әлфиә Ғәббәс ҡыҙы

2019 йыл

# Аңлатма

Дөйөм белем биреүсе мәктәптәр өсөн башҡорт әҙәбиәте буйынса өлгө программа дөйөм белем биреү йөкмәткеһенең фундаменталь үҙәге (ядроһы) һәм икенсе быуын Федераль дәүләт стандарттарында ҡуйылған талаптар нигеҙендә төҙөлдө. Унда шулай уҡ дөйөм белем биреүҙең уҡыу эшмәкәрлеген үҫтереү һәм формалаштырыу программаһынын, төп идеялары һәм положениелары, дөйөм белем биреүҙең башлангыс белем биреү программалары менән күсәгилешлек принциптары күҙ уңында тотолдо.

Уҡытыу башҡорт телендә алып барылған мәктәптәрҙең 5-9-сы кластары өсөн башҡорт әҙәбиәтенән эш программаһы:

1. « Рәсәй Федерацияһынын мәғариф тураһындағы законына» (29.12.2012. №273-ФЗ)
2. Төп дөйөм белем биреү Федераль дәүләт белем биреү стандарты (2010 йылдың 17 декабренән № 1897; )
3. Рәсәй Федерацияһынын мәғариф һәм фән министрлығы тарафынан тәҡдим ителгән бойороғо (2015 йылдың 31 декабренән № 1577) “Төп дөйөм белем биреү учреждениеларында Федераль дәүләт белем биреү стандартына үҙгәрештәр индереү тураһындағы приказына” (2010 йылдың 17 декабренән № 189)
4. «Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында» Законы. •
5. Рәсәй Федерацияһының «Мәғариф тураһында» Законы (29.12.2012 й. N 273-ФЗ
6. «Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында» Законы.
7. Башҡортостан Республикаһының «Мәғариф тураһында» Законы( 01.07.2013й. № 69
8. Башҡортостан Республикаһында Милли мәғарифты үҫтереү концепсияһы.
9. Уҡытыу (туған) башҡорт телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 5-11-се кластары өсөн "Башҡорт әҙәбиәте" предметы буйынса белем биреү өлгө программаларь / Төҙәүсеһе: М.Б.Юлмөхәмәтов. – Өфө: Китап, 2017.
10. «Матрай төп дөйөм белем биреү мәктәбе» муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһының «Уҡыу планы»на ярашлы төҙөлдө.

**Әҙәбиәт курсының базис уҡыу планындағы урыны**

Башҡортостан Республикаһының башҡорт телендә уҡытылған дөйөм белем биреүсе мәктәптәр өсөн йыллыҡ өлгө уҡыу планы әҙәбиәтте 243 сәғәт күләмендә уҡытыуҙы күҙ уңында тота: 5-се класта 70 сәғәт, 9 –сы класта 68 сәғәт, аҙнаһына – 2 сәғәт, 6-8-се кластарҙа – 35-шәр сәғәт, аҙнаһына – 1сәғәт иҫәбенән

**Программаға дөйөм характеристика**

Дөйөм белем биреүсе мәктәптәр өсөн башҡорт әҙәбиәте буйынса өлгө программа дөйөм белем биреү йөкмәткеһенең фундаменталь үҙәге (ядроһы) һәм икенсе быуын Федераль дәүләт стандарттарында ҡуйылған талаптар нигеҙендә төҙөлдө. Унда шулай уҡ дөйөм белем биреүҙең уҡыу эшмәкәрлеген үҫтереү һәм формалаштырыу программаһының, төп идеялары һәм положениелары, дөйөм белем биреүҙең башлангыс белем биреү программалары менән күсәгилешлек принциптары күҙ уңында тотолдо.

Эш программаһы ул уҡыу фәненең инвариант (мәжбүри) өлөшөн билдәләй. Бының сиктәрендә белем биреүҙә авторҙын үҙенә вариатив һайлап алыу мөмкинселеге бирелә. Эш программалары уҡыу материалын структуралаштырырға, уларҙы өйрәнеү эҙмә-эҙлелеген, йөкмәткеһен, күләмен киңәйтә, белем күнекмәләрен һәм эшмәкәрлегенең төрҙәрен, уҡыусыларҙың һәләтен үҫтереүгә булышлыҡ итә. Эш программаларын төрлө йүнәлештәге һәм төрлө профилле кластарҙа файҙаланырға мөмкин, сөнки программала уҡыусыларҙан төп эшмәкәрлеге һәм йәш үҙенсәлектәре иҫәпкә алынған.

Эләө программа күрт бүлектән тора: уҡытыуҙың һөҙөмтәләренә булған талаптар менән “Аңлатма яҙыу” бүлектәрҙен исемдәре менән «Төп йөкмәтке» , уҡыусыларҙың төп

уҡыу эшмәкәрлеге төрҙәрен билдәләүсе «Яҡынса тематик планлаштырыу»; уҡыу процесын йыһазландырыу .

Маҡсат һәм белем һөҙөмтәләре бер нисә кимәлдә бирелә - шәхес, метапредмет һәм предмет йүнәлешендә. Предмет һөҙөмтәләре кеше эшмәкәрлегенең төп сфераларына ярашлы күрһәтелә: танып белеү, ҡиммәт ориентацияһы, хеҙмәт, физик, эстетик тәрбиә.
«Төп йөкмәтке» бүлеге йөкмәткеһе буйынса берләштерелгән блоктарҙы үҙ эсенә ала.

«Яҡынса тематик планлаштырыу» бүлегендә әҙәбиәт курсының яҡынса темалар исемлеге һәм һәр бүлекте өйрәнеү өсөн сәғәттәр һаны, темаларҙың төп йөкмәткеһенә һәм уҡыусылар эшмәкәрлегенең төп төрҙәренә характеристика бирелә.

Программала кластан тыш уҡыу һәм ятлау өсөн әҫәрҙәр исемлеге бирелә.
Программа 5-9-сы класта башҡорт яҙыусыларының йөкмәткеле әҫәрҙәре менән таныштырыуҙы, нәфис әҙәбиәт әҫәрҙәрен уҡыуға ихтыяж тыуҙырыуҙы, дөрөҫ, грамоталы һөйләүҙе һәм яҙыуҙы ғына бурыс итеп ҡуймай. Әҙәби әҫәрҙәрҙең темаһын һәм идеяһын аңлау, геройҙарҙың эштәренә, ҡылыҡтарына дөрөҫ баһа биреү, художестволы әҫәрҙәрҙе айыра, уларҙың теле менән һоҡлана белеү, образлы һөйләү һәм яҙма телмәр формалаштырыу, әҙәбиәт фәне өлкәһендә белем биреү, шәхес булараҡ тейешле кешелек сифаттары тәрбиәләү, универсаль уҡыу эшмәкәрлегенә өйрәтеү - программаның төп йүнәлештәре булып тора.

## Төп дөйөм белем биреүҙең маҡсатына өлгәшеүҙә "Әҙәбиәт" фәненең өлөшө.

Әҙәбиәт һүҙ образы сәнғәте булараҡ – тормошто танып белеүҙең, донъяның художестволы моделен аңлауҙың үҙенсәлекле алымы.
Әҙәбиәт мәктәптәрҙә төп гуманитар уҡыу фәне булараҡ, һәр яҡтан үҫешкән, гармоник шәхесте формалаштырыуға, гражданин һәм патриотты тәрбиәләүгә булышлыҡ итә, баланың ижади һәләтлеген үҫтерә, эмоциональ бай һәм интеллектуаль үҫешкән, үҙенә һәм тирә-йүндәге донъяға тәнҡит күҙлегенән ҡарарғаөйрәнгән шәхес тәрбиәләй.

Халыҡ ижадында һәм башҡорт классик әҙәбиәтендә сағылдырылған дөйөм кешелек ҡиммәттәре һәм шул нигеҙҙә башҡорт халҡының рухи тәжрибәһе менән таныштырыу. Бында, тел билдәләре менән әҙәби әҫәрҙәрҙә һүрәтләнгән тормоштоң художестволы картинаһы тойғолар (эмоция) нигеҙендә генә ҡабул ителмәй, ә интеллектуаль аңлау итеп ҡабул ителә (рационально).

Әҙәбиәтте юҡҡа ғына философия, психология менән сағыштырмайҙар, уны «художестволы танып белеү», «кешене өйрәнеү фәне», «тормош дәреслеге» тип тә атайҙар.

Әҙәбиәт буйынса белем биреү уҡыусыларҙың эмоцияларына ла, фекерҙәренә лә йоғонто яһау юлы менән тормошҡа ашырыла, белем һәм тәрбиә биреүҙә һүҙ сәнғәте саралары менән уҡыусыларҙың тойғоларына ла, фекерҙәренә лә йоғонто яһап, образлы фекерләүҙе байыта, донъяға эстетик ҡараш тәрбиәләнә.

Әҙәби әҫәрҙәрҙе өйрәнеү процесында тәрбиә биреү йәш кешенең әхлаҡ йөҙөн формалаштыра, тормошҡа әүҙем мөнәсәбәт тәрбиәләй.

Әҙәби әҫәрҙәр уҡыусыларҙа ижтимағи күренештәргә, кеше тормошона, уларҙың үҙ-ара мөнәсәбәтенә ҡарата эмоциональ ҡыҙыҡһыныу уята, Шуның өсөн ул кеше күңеленә тәьҫир итеп, әхлаҡ нормаларын формалаштырыуҙа ҙур урын тота.

Тыуған еренә, халҡыңды һөйөү, уның менән һоҡланыу һәм ғорурланыу тойғоһо тыуған теләң, тыуған йортоң, урамың, ауылың һәм республикаңа, уның үткәндәре һәм бөгөнгөләнә ихтирам тойғоһонан башлана. Ул үҙ эсенә халыҡтың үткән данына, хеҙмәт һәм хәрби традицияларына, йыр-моңона, әҙәп-әхлаҡҡағиҙәләренә, этик-эстетик ҡараштарына ихтирам, ата-бәбаларҙан ҡалған аманатҡа, уларҙың яҡты идеалдарына дуҫлыҡ, берҙәмлек, тоғролоҡ кеүек һыҙаттарҙы ла берләштерә. Тыуған йортоңдо һөйөү ҙә тамырланған был тойғо Тыуған иленә, дөйөм кешелеккә һөйөү булып әүерелә.

Әҙәбиәтте уҡытыу процесында донъяға фәнни ҡараш формалаштырыуҙа кешенең аңы ғына түгел, тойғоһо, ижади хыялы, илһам һәм эстетик идеалы ла ҙур әһәмиәткә эйә. Һүҙ сәнғәте булған әҙәбиәттең тәрбиә биреү бурыстарын комплекслы хәл итеү мөмкинлектәре ғәйәт ҙур.

Мәктәптә әҙәбиәт уҡытыуҙың бурыс һәм маҡсаттары уның донъяны танып белеү һәм йәш быуынды тәрбиәләүҙәге үҙенсәлектәренән сығып билдәләнә.

**Әҙәбиәттең өс элементы.**

1) Әҙәби әҫәрҙе үҙен уҡып үҙләштереү өсөн һайланған текстар, яҙыусылар ижады;
2) Әҙәбиәт тарихы һәм теорияһы;
3) Әҙәбиәт белеме буйынса мәғлүмәттәр.

Уҡыусыларҙы рухи байлығыбыҙҙың иң ҙур ҡаҙаныштарының береһе - нәфис әҙәбиәт әҫәрҙәре менән таныштырыу нигеҙендә уларҙы замандың рухи тормошона яҡынайтыу, әҙәбиәт, сәнғәткә ныҡыраҡ йәлеп итеү, шуның менән дөйөм мәҙәни кимәлдәрен күтәреү бурыстары хәл ителә. Әҙәбиәтте уҡып өйрәнеү нигеҙендә уҡыусыларға эмоциональ-эстетик йоғонто яһау, әҙәбиәт тарихы, теорияһы буйынса белем биреү аша эстетик зауыҡ, нәфис әҙәбиәткә мөхәббәт, әхлаҡ тәрбиәһе биреү, логик һәм образлы фекерләү, телмәр мәҙәниәтен үҫтереү маҡсаттары тормошҡа ашырыла. Башҡорт балаһының үҙенең тыуған әҙәбиәтен һәм ауыҙ-тел ижадын өйрәнеүе башҡа халыҡтарҙың әҙәбиәтен уҡыу, өйрәнеү өлгөһөндә тормошҡа ашырыла. Уны өйрәнеү **коммуникатив-эшмәкәрлекле принципҡа** нигеҙләнеп ойошторола.

- Дәрестә эшмәкәрлеккә булышлыҡ итеүсе ыңғай психологик мөхит, матди шарттар, мөмкинлектәр тыуҙырыу.
- Уҡыусыға үҙенә ышаныс булдырыу һәм теләһә ниндәй ҡатмарлы, сетерекле ситуацияларҙан сығыу, хәл итеү ысулдарын таба белеү, эшмәкәрлек сифаттарын башҡа шөғөлдәрҙә һәм башҡа сфераларҙа ҡулланыу.
- Халҡыбыҙҙың йәшәү рәүешен, гөрөф-ғәҙәттәрен, йолаларын, ырымдарын, юрау-һынамыштарын, традицияларын өйрәнеү.
- Уҡыусыны милләте, халҡы, тыуған ере, республикаһы, уның мәҙәниәте менән ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләү.

**Аңлы уҡыу эшмәкәрлеген эҙмә-эҙлекле формалаштырыу түбәндәге этаптарҙан тора:**

- Эшмәкәрлеккә этәргес биреүсе мотив (эске ынтылыш, ҡыҙыҡһыныу тойоу, өйрәнеүсе объектҡа ҡарата маҡсатлы йүнәлеш, теләк һ. б.) тыуҙырыу;
- Уҡыусыларҙың эшмәкәрлектә йөкмәткеһен, йүнәлешен билдәләү; эшмәкәрлекте башҡарыу алымдары, матди кәүҙәләнешен күреү һәм ғәмәли эштәр;
- башҡарылған эштәрҙе, эшмәкәрлек һөҙөмтәләрен барлау, эш сифатын үҙеңә контролләү һәм баһалау.

**Әҙәбиәтте фәнни өйрәнеүҙең төп маҡсаттары булып түбәндәгеләр тора:**

- [illegible] эйә булған, рухи үҫешкән шәхес формалаштырыу;
- Уҡыусыларҙың интеллектуаль һәм ижади һәләтлеген үҫтереү;
- Уҡыусыларҙың башҡорт, рус һәм донъя әҙәбиәтенең ҙур ҡаҙаныштарын аңлауы, уларҙы уҡыу һәм анализлау, һүҙ сәнғәтенең образлы фекерләүгә нигеҙләнеүен, тормош менән бәйләнешле булыуын аңлауы;
- Әҙәби әҫәрҙе аңлы, тасуири уҡыу, комментарий биреү, анализлау күнекмәләрен этап менән эҙмә-эҙлекле формалаштырыу;
- [illegible] йәки башҡа телдәге ниндәй телмәрҙә һалынған мәғәнәләрҙе аңлау [illegible] булыу, үҙеңдең текстыңды төҙөү, уҡылған әҫәр тураһында шәхси баһаңды һәм фекереңде еткерә белеү;

• дөйөм уҡыу күнекмәләренә һәм универсаль укыу эшмәкәрлегенә эйә булыу (библиографик эҙләнеүҙәрҙе тормошҡа ашырыу, төрлө сығанаҡтарҙан кәрәкле мәғлүмәттәрҙе табыу һәм уны эшкәртеү, Интернет менән файҙаланыу һ. б.).

**Тематик, хронологик һәм жанр принциптары**

Улар мәктәп практикаһында оҙаҡ йылдар ҡулланыу осоронда үҙ-үҙен аҡлай килә.
5-6-сы кластарҙа әҙәби әҫәрҙәрҙе урынлаштырыуҙа тематик, 7—8-се кластарҙа тарихи-хронологик принцип, халыҡ ижадын өйрәнеүҙә жанрҙар принцибы ҡабул ителде.
5-6-сы кластарҙа әҙәбиәтте өйрәнеүҙе тематик принципҡа ҡороуҙа төрлө тема, төрлө жанрҙарға ҡараған әҫәрҙәр һайлап алынды.
5-8-се кластарҙа әҙәби әҫәрҙәрҙең айырым темаларға төркөмләп бирелеүе менән бергә, унда индерелгән проза, поэзия, драма әҫәрҙәренең үҙ-ара сиратлашып килеүе лә бик мөһим. Уларҙы үҙ-ара сағыштырып өйрәнеү, шуның менән укыусыларҙың ассоциатив хәтерҙәрен байытыу, әҙәбиәткә булған ҡыҙыҡһыныуҙы көсәйтеү өсөн ҙур мөмкинлектәр асыла. 5—6-сы кластарҙа өйрәнелә торған әҫәрҙәр мәктәп тормошо, балаларҙың тәүге уҡыу көнө, рус теле, туған тел, көҙгө, ҡышҡы, яҙғы, йәйге тәбиғәт, халыҡ ижады әҫәрҙәре, халыҡтың ауыр тормошо, героик көрәше, Ватанды һаҡлау, тыныслыҡ өсөн көрәш һәм әхлаки-этик темаларға төркөмләп бирелгән.

Программаға башкорт әҙәбиәтенең алтын фондын тәшкил иткән, оҙаҡ йылдар мәктәптә һынау үткән әҫәрҙәр менән бергә бик күп яңы исемдәр, яңы әҫәрҙәр индерелде. Халыҡ ижады бүлеге лә яңы әҫәрҙәр иҫәбенә тулыланды, байытылды. Элекке программаларҙа төп урынды алған яҙыусы, шағирҙарҙың ижадтары яңы ҡараштан сығып, һуңғы әҫәрҙәре менән алмаштырылды.

Телмәр үҫтереү буйынса программала ҡаралған эштәр күҙәтеү һәм монографик темалар өсөн бирелгән сәғәттәр эсендә үткәрелә. Телмәр үҫтереү өсөн махсус сәғәттәр ҙә булғанлыҡтан, улар, гәҙиттә, яҙма эштәр үткәреү өсөн файҙаланыла.

Уҡыусыларҙың художестволы әҙәбиәт менән ҡыҙыҡһыныуы, китап һөйөү һәм уның менән эш итә белеү, әҙәби әҫәрҙе үҙ аллы аңлай, баһалай белеү күнекмәләрен үҫтереү өҫтөндә айырыуса ныҡлы эш алып барырға кәрәк. Уҡыусының тормош, әҙәбиәт, образдарҙан сығып кешеләр хаҡында үҙ аллы фекерләүен үҫтереүгә әһәмиәт итеү бик мөһим.

## Уҡыу фәненең дөйөм характеристикаһы.

«Филология» буйынса белем биреүҙең бер өлөшө буларак, «Әҙәбиәт» фәне «Башҡорт теле» менән тығыҙ бәйләнгән. Башҡорт әҙәбиәте уҡыусыларҙың телмәрен байыта, уларҙа телмәр мәҙәниәтен һәм коммуникатив күнекмәләр тәрбиәләй. Художестволы әҫәрҙең телен өйрәнеү уҡыусыларҙы һүҙҙең эстетик мәғәнәһен, башҡорт теленең стилистик матурлығын аңларға булышлыҡ итә.

Дөйөм белем биреусе урта мәктәптәрҙә әҙәбиәт буйынса белем биреү системаһы бер-береһе менән тығыҙ бәйләнештә булған **өс этаптан** тора.
1) Башланғыс кластарҙа белем һәм күнекмәләр биреү аңлатмалы уҡыу аша алып барыла. Был кластарҙа программаларға индерелгән әҙәби әҫәрҙәр, фәнни темаларға яҙылған мәҡәләләрҙе өйрәнеү уҡыусыларҙың анлы уҡыу, яҙыу, һөйләү күнекмәләрен үҫтереү, тормош тураһында белемдәрен киңәйтеү, идея-эстетик, әхлаҡ тәрбиәһе биреү, әҙәбиәткә һөйөү уятыу маҡсаттары менән бәйләп алып барыла. Әҙәбиәт өйрәнеүҙең был баҫҡысында әҙәбиәт теорияһынан бер ни тиклем элементар мәғлүмәттәр биреү күҙ уңында тотолһа ла, аңлатмалы уҡыу дәрестәрендә уҡыусыларға әҙәбиәт теорияһы һәм тарихы буйынса системалы белем биреү төп маҡсат итеп ҡуйылмай.
2) Әҙәбиәт уҡытыуҙың икенсе этабы - 5-8-се кластарҙа әҙәбиәттән белем биреү айырым әҫәрҙәрҙе уҡыу, шулай уҡ әҙәбиәт ғилеме (әҙәбиәт теорияһы менән тарихы) буйынса мәғлүмәттәр системаһын үҙләштереү аша тормошҡа ашырыла.
3) Урта мәктәптең юғары 9-11-се кластарында әҙәбиәт тарихы өйрәнелә.

Заман ҡуйған талаптарҙы, әҙәбиәттең үҫеш кимәлен, әҙәбиәт белеме, педагогика һәм психология фәндәре өлкәһендәге ҡаҙаныштарҙы, уҡытыусыларҙың ыңғай тәжрибәһен иҫәпкә алыу нигеҙендә программаларҙы камиллаштырыу буйынса ыңғай эштәр эшләнә.

Илебеҙҙә дөйөм белем биреүҙең яңы быуын дәүләт стандарттарын индереү барғанда, үҙгәртеп ҡороу хәрәкәте уҡытыуҙың йөкмәткеһен һәм алымдарын яңыртыу, уны өр-яңы нигеҙҙә ҡороу өсөн киң юл асты.Яңы быуын дәүләт стандарттары иң тәүҙә башҡорт әҙәбиәтенән белем биреүҙең күләмен билдәләүҙе талап итә.

Шулай итеп, 5-8-се кластарҙа әҙәбиәтте өйрәнеү айырым әҫәрҙәрҙе уҡып өйрәнеү принцибына нигеҙләнә. Шуның өсөн дә программала төп иғтибар әҙәби әҫәрҙәрҙе һайлауға, уларҙы өйрәтеүҙең системаһын, принциптарын билдәләүгә йүнәлтелә. Йөкмәткеләре яғынан бай, художестволы формаһы менән камил, укытыу-тәрбиә талаптарына яуап бирерлек әҫәрҙәрҙе һайлап алғандан һуң, уларҙы урынлаштырыу - яңы система төҙөү, әҫәрҙәргә аннотация биргәндә әҙәби мираҫты яңыса баһалау, сәғәттәр һанын һәм башҡа нормативтарҙы билдәләү мөһим урын тота.

Бөгөнгө әҙәбиәтте киңерәк өйрәнеү ниәте менән, ҡайһы бер әҫәрҙәр һәм яҙыусылар ижады вариант тәртибендә тәҡдим ителә. Авторҙың бер нисә әҫәренең ҡайһыһына туҡталыу уҡытыусы һәм уҡыусылар ҡарамағына ҡалдырылды, йәғни дөрестә улар күңеленә хуш килгән әҫәрҙәр өйрәнелә, ҡалғандарын белеү мәжбүри түгел. Шул уҡ ваҡытта уларҙы уҡыу һәм өйрәнеү сикләнмәй. Һайлап алыу эшенә балаларҙы ҡатнаштырыу, фекерҙәрен иҫәпкә алыу, уларҙың әүҙемлеген уятыу мөһим.

Һөйләү телен һәм тасуири уҡыу мәҙәниәтен үҫтереү маҡсатында бирелгән эш төрҙәрен әҙәби текстарҙың идея-тематик, жанр, композиция һәм тел үҙенсәлектәренә нигеҙләнеп, әҫәрҙе өйрәнеү өсөн бүленгән дәрес сәғәттәре эсендә үткәрелә.

Программала телмәр үҫтереү буйынса төп эштәр менән бергә ярҙамсы эштәр ҙә күрһәтелгән. Әҙәбиәт дәрестәрендә уҡыусыларҙың һөйләү һәм яҙыу телмәрен үҫтереүгә бәйләп, әҙәби текстарҙы тасуири һөйләү күнегеүҙәре үткәрелә; уның өсөн махсус ваҡыт бүленә. Телмәр үҫтереү өсөн бирелгән был сәғәттәрҙә әҙәби текстағы һүҙҙәрҙе асыҡ итеп, логик баҫымдарҙы, паузаларҙы һәм тейешле темпты һаҡлап уҡырға өйрәнеү маҡсаты ҡуйыла, төрлө жанрҙарҙағы әҫәрҙәрҙең үҙенсәлектәре менән таныштырыла.

Тасуири уҡыу, уҡығанды һөйләп бирә белеү, сағыштырыу, мәҡәл, әйтемдәрҙе һ. б. образлы һүҙҙәрҙе һәм һөйләмдәрҙе телмәрҙә урынлы ҡулланыу, яҙғанда һәм һөйләгәндә цитаталар файҙаланыу, тәбиғәтте күҙәтеү һәм күҙәткәнде яҙып, һөйләп бирә белеү кеүек эштәр уҡыусыларҙың телмәрен үҫтереүҙә айырыуса ҙур әһәмиәткә эйә. Уҡыусыларҙа был күнекмәләрҙе булдырыу - һәр укытыусының бурысы. Юғарыраҡ кластарға күскән һайын был эштәр ҡатмарлана бара.

Программала яңы быуын стандарттары нигеҙендә әҙәбиәт теорияһы буйынса поэтик телдең саралары булған сағыштырыуҙар, эпитеттар, йәнләндереүҙәр тураһында төшөнсәләр биреү күҙ уңында тотолдо. Уҡыусылар был төшөнсәләрҙе ғәмәли үҙләштереһен өсөн, бөтә йыл буйы әҙәби текстарға бәйләп күҙәтеүҙәр һәм күнегеүҙәр алып барыла.

**Эш программаһында әҙәбиәт түбәндәге бүлектәргә бүленгән.**

1. Башҡорт халыҡ ижады.
2. Боронғо әҙәбиәт.
3. XIXбыуат әҙәбиәте.
4. XXбыуат башында әҙәбиәт.
5. Башҡорт совет әҙәбиәтенең формалашыуы.
6. Утыҙынсы йылдар әҙәбиәте.
7. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында башҡорт әҙәбиәте.
8. Һуғыштан һуңғы осор әҙәбиәте.

9. Хәҙерге әҙәбиәт.
10. Туғандаш халыҡтар әҙәбиәте.
11. Әҙәбиәт теорияһы һәм тарихи мәғлүмәттәр.
12. Әҙәби белем кимәлен диагностикалау, ағымдағы һәм йомғаҡлау контроле.
13. Кластан тыш уҡыуҙы ойоштороу,
14. Уҡыусыларҙың тасуири ятҡа һөйләүен ойоштороу.

1-10-сы бүлектәрҙә художестволы әҫәрҙең исемлеге һәм ҡыҫҡаса уларҙың төп проблематикаһы һәм художество үҙенсәлеген күрһәтеүсе ҡыҫҡаса аннотация бирелә. Әҫәрҙәрҙә өйрәнеү алдынан яҙыусының ҡыҫҡаса тормошона, ижадына күҙәтеү яһала. Әҙәбиәт тарихы һәм әҙәбиәт теорияһы буйынса мәғлүмәттәр программаның һәр бүлегендә бирелә, ләкин 11-се бүлек үҙенсәлекле, бында укыусыларҙың әҙәбиәт теорияһы буйынса белемдәрен ғәмәли үҙләштереү һәм системаға һалыу өсөн махсус сәғәттәр биреү ҡарала. Был мәсьәләләр шулай уҡ әҙәби процесс, айырым әҙәби осорҙарҙың, йүнәлештәрҙең һәм ағымдарҙың характеристикаһы менән бәйле ҡарала.
12-се бүлектә әҙәби белем кимәлен диагностикалау, ағымдағы һәм йомғаҡлау контролен тормошҡа ашырыу маҡсатында дәрестәрҙен өлгө йөкмәткеһе бирелә.

## Белем биреүҙә файҙаланылған әсбаптар, методик ҡулланмалар.

### Уҡыусылар өсөн уҡыу-уҡытыу методик комплекты:


1. Башҡорт әҙәбиәте: уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 5-се класы өсөн уҡыу ҡулланмаһы / Авт.-төҙ. М.Х.Иҙелбаев, М.Б.Юлмөхәмәтов, Ә.М.Сөләймәнов, З.И.Яйҡарова. - Өфө, Китап, 2017.
2. Башҡорт әҙәбиәте: уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 6-сы класы өсөн уҡыу ҡулланмаһы / Авт.-төҙ. М.Х.Иҙелбаев, М.Б.Юлмөхәмәтов, Ә.М.Сөләймәнов, З.И.Яйҡарова. - Өфө, Китап, 2017.
2. Башҡорт әҙәбиәте: уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 7-се класы өсөн уҡыу ҡулланмаһы / Авт.-төҙ. М.Х.Иҙелбаев, М.Б.Юлмөхәмәтов. - Өфө, Китап, 2017.
3. Башҡорт әҙәбиәте: уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 8-се класы өсөн уҡыу ҡулланмаһы / Авт.-төҙ. М.Х.Иҙелбаев, М.Б.Юлмөхәмәтов. - Өфө, Китап, 2017.
4. Башҡорт әҙәбиәте: уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 9-сы класы өсөн уҡыу ҡулланмаһы / Авт.-төҙ. Ғ.С.Ҡунафин, М.Х.Иҙелбаев. - Өфө, Китап, 2017.
5. Башҡорт әҙәбиәте. Хрестоматия: уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларынын 9-сы класы өсөн уҡыу ҡулланмаһы / Авт.-төҙ. Ғ.С.Ҡунафин, М.Х.Иҙелбаев. - Өфө, Китап, 2017.
6. М.Х. Иҙелбаев, М.Б. Юлмөхәмәтов, Ә.М.Сөләймәнов. 5-се класс өсөн "Башҡорт әҙәбиәтенән уҡыу китабы" дәреслеге, Өфө, 2015
7. М.Х. Иҙелбаев, М.Б. Юлмөхәмәтов, Ә.М.Сөләймәнов. 6-сы класс өсөн "Башҡорт әҙәбиәтенән уҡыу китабы" дәреслеге, Өфө, 2015
8. М М.Б. Юлмөхәмәтов. 5-се класс өсөн "Башҡорт әҙәбиәте" дәреслегенә эш дәфтәре, Өфө, 2015
9. М М.Б. Юлмөхәмәтов. 5-се класс өсөн "Башҡорт әҙәбиәте" буйынса контроль - баһалау материалдары, 2014
10. М М.Б. Юлмөхәмәтов. 6-сы класс өсөн "Башҡорт әҙәбиәте" дәреслегенә эш дәфтәре, Өфө, 2015
11. М.Б. Юлмөхәмәтов. 6-сы класс өсөн "Башҡорт әҙәбиәте" буйынса контроль - баһалау материалдары, 2014


### Уҡытыусының әҙәбиәт буйынса уҡыу-уҡытыу методик комплекты:


1. М.Х. Иҙелбаев, М.Б. Юлмөхәмәтов. 5-се класс өсөн башҡорт әҙәбиәтенән методик ҡулланма, Өфө, 2017.
2. М.Б.Юлмөхәмәтов, Ғ.С.Ҡунафин. "Башҡорт әҙәбиәте" дәреслегенә методик ҡулланма: уҡытыу туҙан ( башҡорт) телдә алып барылҙан цәйөм белем биреү ойошмаларының 7-9-сы кластары өсөн, Өфө, 2017.
3. Б.Б.Ғафаров. Әҙбиәт уҡытыу методикаһы, Өфө, 2008
4. М. Иҙелбаев. Мәктәптә әҙәбиәт дәрестәре, Өфө,2013
5. . Әҙәбиәт уҡытыу методикаһы. Ғималова М.Ғ, Өфө. "Китап". 2005.

**Өҫтәлмә әҙәбиәт**


6. Баһауетдинова М.И., Йәғәфәрова Г.Н. Башҡорт телен һәм әҙәбиәтен заманса уҡытыу, Өфө, 2009

7. Башҡортса һәм русса мәҡәләр һәм әйтемдәр һүҙлеге, Өфө, 1994.

8 И.Ә.Шарапов. Әҙәбиәт уҡытыуҙа балаларҙың ижади һәләтен үҫтереү, Өфө, 1995.

9. Ғ.Б.Хөсәйенов. Әҙәбиәт теорияһы, Өфө, 2017.

10. М.Б.Юлмөхәмәтов. Башҡорт теле һә туған әҙәбиәт дәрестәрен үҙ-ара бәйләнештә уҡытыу, Өфө, 2008.

11. Башҡорт халыҡ ижады томлыҡтары.

12. И.Ә.Шарапов. Дәрестәрҙә әҙәбиәт теорияһын һәм тыуған яҡты өйрәнеү, Өфө, 2008.

13 Шарапов И.А. Йырауҙар, сәсәндәр, мәғрифәтселәр. Өфө, 2007.

14. Журналдар: "Башҡортостан уҡытыусыһы ", "Аманат", "Шоңҡар ", "Тамаша " .


Материаль-техник ҡулланмала

ноутбук
принтер
проектор
интерактив таҡта